

***Тимеръәле КИЛМӨХӘМӘТОВ,***
***яҙыусы,***
***филология фәндәре докторы,***
***профессор,***
***БДУ-ның журналистика***
***кафедраһы мөдире***

# Заманса һәм зауыҡлы баҫма

«Ватандаш» журналына ҡарата ыңғай фекерҙәмен. Уйҙар, күҙәтеүҙәр күп төрлө. Уларҙы бик конкрет итеп әйтеп бирәһе килә.

Йөкмәтке һәм проблематика йәһәтенән баҫма заманса, күп яҡлы. Баш мөхәррир Фәрит Вафа улы Әхмәҙиев, журналды Ғайса Хөсәйеновтан ҡабул итеп алып, сифат йәһәтенән яңыртыу, артабан үҫтереү буйынса күҙгә күренерлек эш башҡарҙы. Был иң тәүҙә авторҙар даирәһендә күренә. Бөгөн журналға киң билдәле ғалимдар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, әҙәбиәт, сәнғәт әһелдәре яҙыша. Журналда яҫыусылар йыш сығыш яһай. Уҡымлы әҫәрҙәр баҫманы халыҡҡа яҡынайта.

Редакция хеҙмәткәрҙәре лә баҫманы заманса әҫәрҙәр менән биҙәй. Эльвира Халикова, Зөһрә Алтынбаева, Миләүшә Мөхәмәтйәнованың һүрәтләмәләре, корреспонденциялары, мәҡәләләре бөгөнгө тормошто һүрәтләүҙәре менән актуаль.

Полиграфия һәм биҙәлеш йәһәтенән дә журнал ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе. Титул бит, һуңғы биттәрҙәге төҫлө һүрәттәр бик зауыҡлы. Ундағы башҡорт яугирҙәре һәм кантондары (Фәрит Әхмәҙиев тапҡан һәм әҙерләгән материалдар) һүрәттәре айырыуса отошло.

Журнал юбилейы уңайынан редакцияға ғалим һәм уҡыусығыҙ булараҡ бер нисә теләк тә еткергем килә.

Редакция эшенә талантлы, йәш публицистарҙы йышыраҡ йәлеп итеү кәрәк. Көслө публицистар журналда аналитик мәҡәләләрҙе ишәйтер ине. Был бик мөһим.

«Тәнҡит һәм библиография» рубрикаһын активлаштырыу журналды биҙәр, тип уйлайым. Уға ла яңы авторҙарҙы йәлеп итеп эшләтергә, уларҙы «үҙегеҙҙеке» итергә кәрәк.

Журналдың аҙаҡҡы бер-ике битен һуңғы ҡыҙыҡлы яңылыҡтар менән тултырғанда, халыҡ «ябырылып» уҡыр. Журналға очерктар бик кәрәк. Быны яҙыусыларға заказ биреп эшләтеп булыр.

«Ватандаш» журналы редакцияһына ижади табыштар, асыштар, яңынан-яңы уҡыусылар теләп һәм ҡайнар сәләм еткереп ҡалабыҙ.